# Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.




Уҡыусы. Донъяла төрлө илдәр бар. Бер ил үҙенең тауҙары, икенселәре – далалары, өсөнсөләре – һыуҙары, дүртенселәре – урмандары менән мәшһүр.

Уҡыусы. Урал… Был исемде әйтеү менән күҙ алдына әкиәт батшаһының һарайына оҡшаған бейек ҡаялар, иге-сиге булмаған ҡуйы урмандар, таштан-ташҡа һикереп аҡҡан шишмәләр, сәскәле аҡландар килеп баҫа.

Уҡыусы. Ләкин бөтә матурлыҡтарҙан да өҫтөн, ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле – беҙҙең халҡыбыҙ, үҙебеҙҙең башҡорт телебеҙ.

Уҡыусы. Беҙҙең телебеҙ музыкаль, һығылмалы, өндәребеҙ бай һәм яғымлы.

Уҡыусы. Башҡорт балаһы мин…

Ер хәтерендә,
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Уҡыусы. Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын

Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.

Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,

Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,

Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған

Бергә.     Тик моңонан, теленән яҙмаған.

Уҡыусы.  Башҡорт илен тотош утҡа солғап

Тәфтиләүҙәр низәр ҡылмаған.

Тик батшалар телен киҫкәндә лә

Башҡортом бит телһеҙ булмаған.

Уҡыусы.  Башҡорт теле, эйе, саф шишмәләй

Осорҙар аша аҡҡан сылтырап.

Һәр бер һүҙе унын сулпы кеүек

Сыңлап тора уйнап, йылтырап.

Уралтауҙың һыбай бөркөттәрен

Ғорурлығы иткән Кутузов

Париждарға барып еткән башҡорт,

Походтарҙа ауыр юл үтеп.

Йыр. Любизар.




Уҡытыусы.  Татлы телдең төбө шәрбәт, мөләйем

Тибрәнһен шул шәрбәт телем һәр даим

Бирҙең, тәңрем, телде шуға әйҙәйем, тип яҙған Аҡмулла. Тел – ул халыҡтың мәңге тере тарихы ла. Шул ғәзиз тел уны борон бер халыҡ итеп ойошторған. Уртаҡ тел, һүҙ таптырған, күңелендәгеһен үҙенә туплап, уның күркен күтәрешкән, кемлеген бар донъяға танытҡан, халыҡтар менән аралаштырған.

Уҡыусы. Тел- халыҡтың иң ғәзиз бүләге, йәшәү, аралашыу рәүеше. Теле барҙың иле бар, иле барҙың теле бар, тигән борон сәсәндәр.

Уҡыусы. Ата-бабаларыбыҙҙан үлемһеҙ бүләк, иң изге аманат булған үҙ туған телебеҙҙә халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм тарихын да, аҡылы һәм үлемһеҙлеген дә күрергә мөмкин.

Ер-әсә керә.

Ер-әсә. Һаумыһығыҙ, балалар.

Балалар. Һаумы, Ер-әсә.

Уҡыусы. Ер-әсә, ниңә йөҙөңдә хәсрәт, күҙҙәреңдә һағыш.

Уҡыусы Ниндәй ҡайғы төштө башыңа.

Ер-әсә. Бөгөнгө ҡайғым, хәсрәтем әсә теле, башҡорт телем. Ҡайғырмаҫлыҡмы ни… ата-бабаларыбыҙҙың теле ярлылана. Башҡорт ҡыҙҙарыбыҙ башҡа милләт егеттәренә кейәүгә сыға, егеттәребеҙ сит милләт ҡыҙҙарына өйләнеп, телдәрен юғалта. Ошо арҡала күпме башҡорт үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәре итеп яҙа, йәки башҡорт тип яҙылған хәлдә лә үҙ телдәрендә һөйләшмәй.

Уҡыусы. Минең телем- меңәрләгән телдәр кеүек моңло тел ул

Үҙенә бай, үҙенә хас уның көйө.

Уралы һәм Буранбайы,

Һандуғасы һәм Сибайы,

Сәлимәкәй, Таштуғайы.

Уҡыусы . Башҡорт халҡы матур ғүмер итә

Ағиҙелдә, тыуған илендә.

Һайраша ул тарих күкрәгенән

Урғып сыҡҡан туған телендә.

Ҡаяһына яңы шиғриәттең

Ҡыҙыл байраҡ элгән Ғафури.

Сәхрәләй киң халыҡ йырҙарында

Башҡорт теле ғорур яңғырай.

Ер-әсә.  һәр халыҡтың үҡ теле, көйө, яйы бар. Сабый тәү тапҡыр әсәһе әйткән һүҙҙәрҙе аңлау, уның һорауҙарына яуап биреүҙән үҙ телендә һөйләшергә өйрәнә.. Шуға ла туған тел, әсә теле тип атала.

<u>Уҡыусы</u>. З.Бииишеваның шиғырын һөйләй.

Ике уҡыусы Р.Ғарипов шиғырын һөйләй.

Бергә.  Һөйләшегеҙ туған телдә

Туйғансы һөйләшегеҙ.

Тел тыуҙырған шатлыҡтарҙы

Кешегә өләшегеҙ.

Йыр.  Туған тел.

